Заман уҡытыусыһы: профессионализм (һөнәрлелек) һәм компетентлылыҡ.

Уҡытыусы! Һинең исемеңдән дә,
Гүзәлерәк исем бармы икән?!

Уҡытыусы – иң ҡатмарлы, иң ауыр һөнәрҙәрҙең береһе. Балаларҙы уҡытыу өсөн белемле, киң эрудициялы, түҙемле, эшһөйәр, яҡшы психолог та, талант эйәһе лә, фантазияға бай ҙа булыу мөһим.

Уҡытыусы – белем нурҙарын балаларға өләшеүсе изге йән эйәһе. Белем шишимәһен асыр,наҙанлыҡ ҡараңғылығын таратыр, донъя көтөү юлдарын өйрәтер оло көс, аҡыл эйәһе ул.

Уҡытыусы – мәҙәниәтебеҙҙең усағы, ул социаль әхлаҡи нормаларҙы теорияла һәм практикала өйрәтә һәм ҡуллана, унан "тормош башлана". Уҡытыусы – әсәй ҙә, атай ҙа, дуҫ та, ярҙамсы ла, кәңәшсе лә, тыңдәшсе лә.Уҡыусы уҡытыусының ҡылығына ла , һөйләшеүенә лә, кейеменә ҡарап та өлгө ала.Шуға күрә уҡытыусының тышҡы ҡиәфәте лә, телмәре лә уҡыусылар өсөн үрнәк булырға тейеш. Оло йөрәкле уҡытыусының уңыш сере балаларҙың ышанысын, ихтирамын яулауында.

Заман беҙгә ниндәй талаптар ҡуя?

Йылдан-йыл уҡытыусыға мәктәптә эшләүе лә ҡатмарлаша бара. Сөнки тормош алға бара, шунлыҡтан мәғариф системаһында ла үҙгәрештәр арта, уҡытыусыға ҡарата ла талаптар көсәйә. Заман уҡытыусыһы педагогиканы, психологияны яҡшы үҙләштереп, уның алымдарын кәрәк саҡта дөрөҫ ҡуллана белеп, үҙ фәненә оло һөйөү уятырлыҡ дәрестәр бирерлек ныҡлы белемле булырға тейеш. Заман талаптарынан ҡалышмай, яңылыҡтарҙы үҙләштереп барырға, компьютер, интернетты оҫта файҙалана белергә, яңы алымдарҙы үҙләштерергә, уйланырға, эҙләнергә, алдынғы уҡытыусыларҙың тәжрибәһен өйрәнергә, ата-әсәләр менән тығыҙ бәйләнештә торорға, уҡыусыларҙың мөмкинлектәренә ҡарап дәрес алымдарын дөрөҫ ҡуллана белергә һәм балаларҙың хеҙмәтен ғәҙел баһаларға тейеш.

Уҡытыусы эшенең өҫтөнлөктәре, ысынлап та, бик күп. Тракторсы ер һөрә, һатыусы һата, бухгалтер һанай. Уларҙың барыһы ла бына ошо ҡушылған эште генә башҡара, ә нимәлер өҫтәп, үҙенсә эшләй алмай. Ә уҡытыусы дәресен үҙе теләгәнсә ҡора, бынан тыш, төрлө КВН-дар, кисәләр, конкурстар үткәрә, талантлы балалар менән эшләй, уларҙың кәңәшсеһенә, серҙәшенә әйләнә, ата-әсәләр менән аралаша, коллегалары менән тәжрибә уртаҡлаша, өйрәнә һәм белгәнен башҡаларға өйрәтә. Балалар менән эшләгән уҡытыусы һәр ваҡыт йәш булып ҡала. Сөнки йәш быуын уға илһам өҫтәй, дәрт һәм үҙҙәренең энергияһын бирә.

Заман уҡытыусыһы ниндәй булырға тейеш?

Әлбиттә, бөгөнгө уҡытыусы иң элек юғары интеллектлы, итәғәтле, заман технологияларын яҡшы белгән булырға тейеш. Бер кеше лә был донъяла бар нәмәне белеп бөтмәй. Балалар берәй һорау биреп, уға дөрөҫ кенә итеп яуап ҡайтара алмаһаҡ, уларҙы алдау менән эш бөтмәй, ә киреһенсә: "Әйҙәгеҙ, был һорауға бергәләп яуап

эҙләйек”, – тип мәсьәләне сисеү бик тә дөрөҫ булыр. Белмәү оят түгел, белергә теләмәү оят. Шуның өсөн дә уҡытыусы ғүмер буйына белемен камиллаштырырға, үҙ алдына бик күп уҡырға тейеш. Билдәле педагог Л.В.Занков: “Һәр яҡлы үҫешкә, рухи байлыҡҡа көсләп өлгәштереп булмай. Кеше үҙе ынтылырға тейеш.” тигән бит.

Бөгөнгө уҡытыу методикаһын мәғлүмәт технологияһыҙ күҙ алдына килтереп тә булмай. Ун йыл элек кенә компьютер, интернет тигән нәмәләр төшкә лә инеп сыҡмаһа, хәҙер улар уҡытыусыларҙың иң беренсе ярҙамсыһына әйләнде. Әлбиттә, уларҙы дәрестәрҙә ҡуллана башлағас, эш икеләтә артһа ла, балаларға теманы аңлатыу шаҡтай еңеләйҙе, дәрескә ҡыҙыҡһыныу ҙа артты.

Әгәр яңы федераль белем биреү стандартына таянып уҡытыуҙы башҡа предметтар менән бәйләп, төрлө шәхсән,регулятив(көйләү), текст менән эшләү, коммуникатив (аралашыу), танып-белеү ғәмәлдәрен ҡулланып балаларҙың физиологик үҫешенә таянып яңы технологиялар ҡулланып эшләгәндә башҡорт телен һөйөүселәрҙең, теләп өйрәнеүселәрҙең ,ғөмүмән уҡытыусыларҙың компетентлылығы бермә – бер артыр ине.

Нимә ул “компетентлылыҡ”? Ошо терминдың мәғәнәһенә асыҡлыҡ индереп китмәксемен.

Р.А. Абулатипов, А.В. Камалетдинованың һүҙлегенә мөрәжәғәт иткәндә, унда былай тип бирелә:”Белделеклелек, белгәнлек”, “ нигеҙлелек, төплөлөк”, икенселәрендә был төшөнсә “айырым бер өлкәлә тейешле белемле булған, яҡшы белемле” тип аңлатыла..

Ә В.М. Полонский үҙенең һүҙлегендә:” Компетентлылыҡ – кешенең тейешле өлкәлә күнекмә булдырыу һәм практик яҡтан нығытыу ти”.

Ул беренсе урынға уҡытыусының мәғлүмәти яҡтан белемен сағылдырмай, ә уның тормошта төрлө осраҡтарҙа килеп тыуған мәсьәләләрҙе, проблемаларҙы сисә белеүҙе күҙ уңында тота:

Компетентлылыҡ “ әҙер килеш бөтәһен дә бирергә түгел, ә өрәнергә өйрәтергә» тигәнде аңлата. Ошонан сығып компетентлыҡтың төп маҡсаты булып мәктәп дәүерендә төрлө яҡтан үҫешкән уҡыусы шәхесен формалаштырыу, уның фекерен , тел интуицияһын, һәләтен, телмәр культураһын, аралашыу культураһын, ҡылығын үҫтереү тора .

Компетентлылыктың 4 төрө була.

1. Тел компетенцияһы лингвистик компетенцияһы нигеҙендә барлыҡҡа килә. Ул һүҙҙәрҙе әҙәби тел нормаларына ярашлы, дөрөҫ итеп ҡулланыуҙы күҙ уңында тота.
2. Лингвистик компетенцияһы формалаштырыу – ул терминдарҙы яҡшы белеү, телдең төҙөлөшөн, функцияларын үҙләштереү.

3. Коммуникатив компетенция – аралашҡанда тел һәм телдән тыш сараларҙы маҡсатҡа һәм ысынбарлыҡҡа ярашлы, теманан, ситуациянан һ.б. ҡуллана белеү.
4. Лингвокультурологик компетенция – лингвокультурология өлкәһендә компетентлы булыуҙы талап итә.

Ошо дүрт төрө лә беҙгә , уҡытыусыларға, хас сифат булырға тейеш.

Һәр дәрескә ижади ҡараш кәрәк

В.А.Сухомлинский : “Дәрес – ҡыҙыҡһыныусанлыҡ һәм әхлаҡи инаныуҙар факелы тоҡандырыусы осҡон ,” –тигән. Шул осҡондо тоҡандырыу йәһәтенән балала телгә ҡыҙыҡһыныу ,өйрәнеү теләге булдырыу өсөн беҙ дәрестәрҙә ғәжәпләнеү, һоҡланыу тойғолары уятырлыҡ заманса технологиялар,уҡытыу методтары ҡулланырға тейешбеҙ.

Баланы, һин башҡортса дөрөҫ итеп һөйләшә, уҡый белергә, хатаһыҙ яҙырға тейешһең, тип кенә дәресеңә йәлеп итеп булмай. Уҡыусыларҙа башҡорт теленең гүзәллегенә, серле ҡурай моңона, Салауат батыр тоҡомоноң мәҙәниәтенә, сәнғәтенә, үткәненә, бөгөнгөһөнә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятып, киләсәгенә ышаныс, өмөт тәрбиәләү өсөн педагогик алымдарға таянып эҙләнергә, яңынан-яңы алымдар ҡулланып, дәрестәрҙе төрләндерергә тейешбеҙ. Эшебеҙҙә компьютер, интернет, ксерокс, төрлө видеояҙмалар кеүек заманса технологияларҙы ҡулланыу дәрестәргә әҙерләнеүҙе һәм уҡытыуҙы күпкә еңеләйтте. Уҡыусылар бер генә минутҡа ла эшһеҙ ҡалмаҫҡа, уй-фекерҙәрен ситкә ебәрмәҫкә тейеш, тигән маҡсаттан сығып, яңы тема аңлатҡанда күберәк уларҙың үҙҙәрен йәлеп итергә кәрәк. Фекерҙәрен асыҡ итеп әйтергә, яһалған хаталарҙы ваҡытында төҙәтә белергә өйрәтеүҙе маҡсат итеп ҡуйырға тейешбеҙ.

Балаларҙы яратҡан кеше генә мәктәптә эшләй ала

Даръялай киң бала күңеленең нескәлектәрен аңламай тороп, нидәйҙер белем йәки тәрбиә биреү – башыңды ташҡа бәреү менән бер.Ул бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәйәсәк.Ошо күркәм һөнәргә илһөйәр, телһөйәр балаларҙы ысын күңелдән яратҡан, улар менән тығыҙ бәйләнеш тыуҙыра алған,үҙенең эшенә яуапсан ҡараған кеше генә эйә була алалыр,сөнки ысын уҡытыусы булыр өсөн белемдәр шишмәһе,сабырлыҡ, түҙемлелек, ысын кешелеклелек һәм педегогик оҫталыҡ кәрәк. Баланың буласаҡ профессияһы уҡытыусынан тора ,ә уҡытыусы профессияһы кешегә хоҙай тарафынан бүләк ителә, тигәндәре бик тә дөрөҫтөр.

Ниндәй заманда ғына йәшәһәк тә бала бала булып ҡала. Шуҡтары, шаяндары, тиктормаҫтары, үтә иплеләре, аҡыллылары бар. Ғөмүмән, хәҙерге балалар тәртипһеҙ, насар, тигән һүҙҙәр менән килешмәйем. Эшемдә минең өсөн иң мөһиме – холоҡ-ҡылыҡтарына, милләтенә, социаль хәленә айырып ҡарамай, балаларҙы ысын күңелдән ярытыу, һәр балаға шәхес итеп ҡарау. Уларҙа буласаҡ ата-әсәләрҙе, илдең, донъяның киләсәген күреү.

Оҫталыҡ һөнәргә тогролоҡтан килә

Әлбиттә, хәҙерге заманда аҙ түләүле лә, ауыр ҙа, яуаплы ла һөнәрҙең абруйы кәмегән һымаҡ. Заман башҡа – заң башҡа тигәндәй, заманалар үҙгәреүе менән балалар, йәш быуын үҙгәрә. Тимәк, уҡытыусы ҡайһы ғына заман, ниндәй генә ауырлыҡтар булмаһын, уҡытыусы булып ҡала белергә тейеш, минең уйлауымса.

Үҙ һөнәреңдең оҫтаһы булып танылыу өсөн һәр саҡ заман менән бергә атларға, алдынғы ҡарашлы булырға, ең һыҙғанып эшләргә, ижади эҙләнергә, професссиональ һәләтеңде, белемеңде үҫтерергә кәрәк. « Аң- белем үҫешен һәм белемде бер кешегә лә биреп ҡуйып булмай. Өйрәнергә теләгәндәр быға үҙенең эшмәкәрлеге, үҙенең көсө менән ирешергә тейеш,» тигән бит бөйөк аҡыл эйәһе А.Дистервег.

хәҙерге заман уҡытыусыһына хас һыҙаттар йыйылмаһы

Профессионал(үҙ эшенең оҫтаһы);
Креатив, ижади уйлы,
Кешеләр менән аралаша белеүсе,
Яңы технологиялар менән ҡыҙыҡһыныусы, хәбәрҙар булыусы,
Юмор тойғоло,оптимистик рухлы,
Проблемалар ҡуйыусы һәм уларҙы хәл итә белеүсе,
Үҙ- үҙен үҫтергән һәм үҙ-үҙен камиллаштырыусы,
Үҙ- үҙе менән идара иткән.
Яуаплы , социаль йүнәлештә яуап тотоусы.
Рефлексив ҡарашлы,
Әҙәпле,итәғәтле,
Юғары интеллектлы,
Ғәҙел, объектив ҡарашлы,

Ысын һөнәр оҫталары бер ике йылда ғына яралмай. Бының өсөн күп йылдар, хатта ғүмер буйына һөнәреңә тоғро ҡалып, шул йүнәлештә тырышып эшләргә кәрәк. Әле генә хеҙмәт юлын башлаған йәш уҡытыусылар ҙа шуны белһен, ауырлыҡтарға осраһалар ҙа бирешмәһен, тағы ла сәмләнеберәк эшләһен ине. Шулай уҡ балаларҙы яратһындар, һөнәрҙәренә яуаплы ҡараһындар, тигән теләктәмен.

Уҡытыусы – һәләтле икән, ул бөтә өлкәләрҙә лә һәләтле була. Шуға ла беҙ бөйөк исем – уҡытыусы исемен йөрөтәбеҙ! Һәр көн эшкә йылмайып килеп, дәрес биргәндә, теләк менән, матур, аңлайышлы, ҡыҙыҡлы итеп һөйләп, балаларыңды ҡыҙыҡһындыра алаһың икән – һин уҡытыусы! Йылдар үткәс, һине иҫкә төшөрөп, тыуған мәктәбеңә килеп, һин сығарған уҡыусыларың килеп хәлдәреңде белеп тора икән – һин уҡытыусы! Үҫеп ғаилә ҡороп балалары булғас, һине маҡтап, мәктәпте данлап, “Уҡыу – иң кәрәге донъяла!”, тип әйтә алған ата – әсәлә һинең ролең бар икән – һин уҡытыусы! Уҡыусыңдың артабанғы тормошонда уҡытыусы һөнәрен һайларлыҡ орлоҡтар сәсә алдың икән – һин уҡытыусы! Тормошта уҡыусыларың матур ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп, кеше итә алдылар икән – һин уҡытыусы!

Шулай итеп йәш быуынға белем һәм тәрбиә биреү,уларҙы һаклау,лайыҡлы йәшәтеү – уҡытыусыға аманаттай тапшырылған изге бурыс,шуға хыянат итмәйек.

Зиһенебеҙҙә булған белемде,күңелебеҙҙәге тәүфиҡ һәм иманды килер быуындарға тейешенсә өйрәтәйек.

Ҙур бәхет ул бөтә ғүмереңде
Йәш быуынға биреү, бағышлау.
Илең – халҡың менән бергә атлау,
Тормош ағышынан ҡалышмау.
Илгә лайыҡ улдар,ҡыҙҙар
Тәрбиәләү ниндәй ҡыуаныс?
Уҡытыусы өсөн бынан да
Бармы икән оло йыуаныс?